*Жанфизә ВАҺАПОВА*

# Йырға, моңға тоғролоҡ

Бөтә Рәсәйҙәге кеүек, беҙҙең Силәбе яҡтарында ла 90-сы йылдарҙа милли хәрәкәт киң ҡолас алды. Халҡыбыҙҙың туған теленә, мәҙәниәтенә, тарихына ҡыҙыҡһыныуы бермә-бер артты. «Үҙ телеңдә һөйләшмә, йырлама, рус телендә генә һөйләш» тигән тыйыуҙар бер йыл эсендә юҡҡа сыҡты.

Ошо йылдарҙа Ҡоншаҡ районы етәкселеге «Милли тергеҙеү» программаһын ҡабул итте, унда бик күп эштәр һәм саралар планы ҡаралғайны. Бына 15 йыл үтеп китте. Уңыштар байтаҡ, әммә, ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡайһы бер теләктәр ғәмәлгә ашмай ҡалды.

*Силәбе өлкәһенең ”Иң талантлы ғаилә” конкурсында еңеүсе Илдар, Әлфиә, Эльза, Мөнирә һәм Дарвин Хәйретдиновтар*



Был осорҙа «Милли тергеҙеү» программаһы тип тормай, халыҡ үҙе ҡуҙғалып сыҡты: мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуға, башҡорт халҡының тарихын, халҡыбыҙҙың боронғо ғөрөф-ғәҙәттәрен, фольклорҙы өйрәнеүгә иғтибар артты.

Әлбиттә, был эш башында иң элек әүҙем уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре торҙо. «Тергеҙеү — ул бәләкәй генә эштән башлана» тигән маҡсат менән күтәрелеп сыҡты апай-ағайҙар. Милли эш — ул тәрбиә, ә тәрбиә эше менән күберәк ҡатын-ҡыҙҙар шөғөлләнә. Шуның өсөн дә күп эште ҡатын-ҡыҙҙар башлап ебәрҙе. Дружный ҡасабаһында, Хәмит ауылында — «Әхирәттәр» клубы, Ҡоншаҡта — «Туған тел» түңәрәге, Һары, Ибраһим, Ғәшир, Бүре, Мансур ауылдарында башҡа эштәр ҡайнап китте.

Дружный ҡасабаһындағы «Әхирәттәр» клубын Эльза Һибәт ҡыҙы Хәйретдинова ойошторҙо. Бәхеткә ҡаршы, уның ғүмер юлдашы Дарвин Минһаж улы — клуб мөдире, баянсы. Йыйылырға урын да бар. Боронғо йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәт, байрамдарҙы тергеҙеү маҡсатында «Ҡарға бутҡаһы», «Кәкүк сәйе», «Аулаҡ өй» байрамдары, таҡмаҡ-йырҙар кисәһе, бишек йыры һәм бәпес туйы, туй йолаларын тергеҙеү кисәләре үткәрҙеләр. Ә никах йолаһы үҙе бер мөғжизәле спектаклгә әйләнде: ҡурайҙа башҡарылған «Урал» көйөнә кейәү менән кәләш ҡыҙыл һуҡмаҡтан залға инә, тантаналы тауыш менән никах йолаһы иғлан ителә. Ата-баба телендә әйтелгән һүҙҙәр, изге теләктәр үҙәккә үтеп инә, күҙҙән йәштәр бәреп сыға. Ошолай никах теркәүҙәрен һорап, Дружный клубына күрше район йәштәре лә килә башланы. Һәр никах онотолмаҫлыҡ ваҡиғаға әүерелә. Шуны әйтергә кәрәк, Дружный клубында теркәлгән ғаиләләр араһында айырылышҡандар бик һирәк.

Дини байрамдар ҙа яңы төҫ алды. Ҡорбан, Ураҙа байрамдары бәйет һәм мөнәжәт, йыр һәм бейеү бәйгеһе менән аралашып бара. «Ҡарға бутҡаһы» байрамын ғына ла ете тапҡыр үткәрҙеләр. «Науруз» байрамы, юбилейҙар, ижади кисәләр, алтын һәм көмөш туйҙар туған телдә үтте, туған моңдар яңғырап торҙо.



### Дарвин

Ул Ҡоншаҡ районының Ҡоложбай ауылында тыуып үҫкән. Ҡоложбай ауылы, уның мәктәп бинаһы Абдулҡадир Инандың «Хәтирәләре»ндә лә телгә алынған. Атаһы Минһаж ағай, заманының уҡымышлы кешеһе, райком инструкторы, район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары булып эшләй. Ошо посынан үҙе теләп фронтҡа китә һәм рота комиссары дәрәжәһендә 1942 йылда һәләк була. Ҡатыны Гөлсөм апай ике бала — улы Дарвин һәм ҡыҙы Римма менән тороп ҡала. Төҫкә сибәр, оҫта йырсы ҡатындың матур

сифаттары улына ла күсә — әсәһе кеүек йырсы булып үҫә Дарвин. Ошо йылдарҙа Ҡоложбайҙа данлыҡлы, Башҡортостанда ла билдәле бейеүсе Хафиз Ғөбәев йәшәй. Йәш малайҙарҙы бейергә өйрәтә ул. Дарвин унан бейергә өйрәнә. Ә гармунда уйнарға инде уны күрше Ыҫҡайлы ауылынан Әнүәр Сәлимов өйрәтә. Күҙгә зәғиф Әнүәр ағай таҡта ослоғонан да көй сығара торған оҫта була. Үҙенең балалары ла йә йырсы, йә уйынсы: улы Илдар баянда оҫта уйнай, көйҙәр яҙа, ҡыҙы Сүриә Өфө филармонияһында йырсы, уның репертуарында ағаһы Илдарҙың да йырҙары байтаҡ.

Әкиәттәге батыр көстө ерҙән алһа, Дарвинға һәләтте ябай халыҡ — яҡташтары өләшкән.

Мәктәпте тамамлағас, Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә Дарвин. Йыр һәм бейеү ансамбле менән шул төбәктәге бөтә ҡалаларҙы, порттарҙы, хәрби частарҙы йөрөп сыға. 1956 йылда һалдат Дарвин Хәйретдинов юғары башҡарыу оҫталығы өсөн СССР Оборона министрлығының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнә.

Мәктәптә уҡыған сағында уҡ Дарвин ятҡа шиғырҙар, хикәйәләр һөйләп, район олимпиадаһында призлы урындар һәм дипломдар алып йөрөй. Әйткәндәй, был һәләтен ул әле юғалтмаған: А.Толстойҙың «Русский характер» хикәйәһен, М.Шолоховтың романдарынан өҙөктәрҙе, А.Твардовскийҙың «Василий Теркин» поэмаһын оҫта башҡара.

Хеҙмәт итеп ҡайтҡас, Дарвин Силәбе сәнғәт училищеһында белем ала, профсоюз институтын тамамлай, Ҡоншаҡ районының ауыл клубтарында эшләй.

## Эльза

Башҡортостандың Учалы районы Ҡарамалы ауылында уҡытыусы Сәғитовтар ғаиләһендә тыуып үҫкән. 1938 йылда Һибәт ағай менән Ләлә апай Ҡоншаҡ районының Бүре ауылына күсеп киләләр. Һибәт ағай — директор, Ләлә апай башланғыс мәктәп уҡытыусыһы була. Һуғыш башланған йылды уларҙы Ҡоложбай мәктәбенә күсерәләр. Һибәт ағай һуғыштың беренсе көнөнән фронтҡа алына. Кавалерия полкының взвод командиры лейтенант Сәғитов 1942 йылда Ленинград фронтында һәләк була.

Ләлә апай береһенән-береһе бәләкәй дүрт бала менән тороп ҡала. Партия ойошмаһы секретары, уҡытыусы булған әсә өйөнә, балалары янына бик һуң ғына ҡайта. Күрше Гөлсөм Хәйретдинова ла һалдат ҡатыны. Тол ҡалғандарын улар һуғыш бөткәс тә оҙаҡ йылдар белмәй — өмөттәрен өҙмәй ирҙәрен көтәләр. Балаларын бергә ҡарап, күберәк бер өйҙә генә йылытып, дуҫ йәшәй ике күрше. Ҡышҡы кистәрҙә үҙҙәре бәйләм бәйләгәндә, яманғанда балалары менән йырлап-һөйләшеп күңел асалар.

Тере кеше йәшәү юлын эҙләй, бигерәк тә әсә кеше. Уның оло бурысы — балаларҙы ҡурсалау, тамаҡтарын туҡ итеү, кейендереү.

Бәләкәйҙәр тураһында хәстәрлек балаларҙың ололары — Дарвин менән Эльза өҫтөндә. Еләккә, башаҡ йыйырға йөрөйҙәр, баҡсала картуф һәм йәшелсә үҫтерәләр. Шуның өсөндөр ҙә инде, Дарвиндың һеңлеһе Римма, Эльзаның Сайран, Рәис, Әлмира туғандары уртаҡ булып үҫә һәм ғүмергә бер туған булып ҡала. 50 йыл бергә йәшәгән Эльза менән Дарвин ир менән ҡатын, бала саҡтан бергә үҫкән күрше, синыфташ, ҡорҙаш — бер туғандар кеүек, шатлығы ла, ҡайғыһы ла уртаҡ уларҙың.

Троицк педучилищеһын тамамлағандан һуң, Эльза Ҡоложбай ауылында уҡыта. Үҙен оҫта ойоштороусы итеп таныта, йырлай һәм матур бейей. Әйткәндәй, беҙҙең яҡта «Бишбармаҡ» бейеүен унан да оҫта бейегән кешене күргәнем юҡ. Яғымлы, һәләтле йәш уҡытыусы ҡыҙ янында йәштәр туплана, концерттар һәм спектаклдәр ҡуялар. Ул ойошторған бейеү коллективы өлкә фестивалендә призға патефон алып ҡайта.

Дарвин, Эльза мине көтмәҫ, тип, армияға китерҙән алда уны ЗАГС-ҡа алып бара. «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» тиеүҙәре тағы бер раҫлана: барыбер бергә була улар.

Эльза Һибәт ҡыҙы уҡытыусы һәм балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып 40 йылдан артыҡ эшләне, үҙҙәре лә өс бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Уларҙы ваҡытында ашатып-эсерергә, өҫ-башын, мәктәп тормошон күҙ уңында тоторға — барыһына ла өлгөрөргә тейеш әсә кеше. Иренең эше тынғыһыҙ икәнен белгән Эльза ғаилә, балалар, йорт мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөнә ала.

Һуңғы йылдарҙа ул шиғырҙар яҙа, көйҙәр ижад итә.

## Тормош юлдары

Дарвин Хәмит ауыл мәҙәниәт йортонда ғына 17 йыл эшләне: үҙе директор, үҙе баянсы, үҙешмәкәр түңәрәктәр етәксеһе, хор һәм вокалға өйрәтеүсе. Йәш саҡ — дәртле, көслө, ауырлыҡтарҙы тоймай торған саҡ. Эльза иһә Дарвиндың ҡатыны йәки балаларының әсәһе генә түгел, беренсе ярҙамсыһы, сәхнәлә беренсе партнеры була.

«Клубта эшләгән кеше менән йәшәүе еңел түгел, — ти торғайны Эльза. — Мин үҙем дә сәхнәне яратам. Сәхнә — ул минең өсөн байрам, мөғжизә донъяһы. Шулай йәшәмәһәң һәм эшләмәһәң, клуб янына яҡын да йөрөмә. Сәхнә тормошонда башҡаса йәшәп тә булмай».

Хәмит мәҙәниәт йортонда эшләгән йылдары уларҙың иң дәртле, һәләттәренең иң юғары баҫкысҡа күтәрелгән мәле булғандыр. «Осрашыу», «Шаяртыу» кеүек башҡорт бейеүҙәрен, рус һәм башҡа халыҡтар бейеүҙәрен башҡарып, тамашасыларҙы хайран ҡалдыралар. «Шаяртыу» бейеүе менән Хәйретдиновтар 1965 йылда Свердловск ҡалаһында үткәрелгән үҙешмәкәр артистарҙың Бөтә Рәсәй конкурсында 1-се урын яулап, I дәрәжә диплом алып ҡайта. Уларҙың фотоһүрәте «Культпросвет» журналының тышында баҫыла.

Шул уҡ йылдарҙа халыҡ хоры коллективының уңыштары өсөн уның етәксеһе Дарвин Минһаж улы өлкә мәҙәниәт идаралығының Почет грамотаһы менән бүләкләнә. Ул ойошторған концерттар һәм спектаклдәр, ял һәм бейеү кисәләре, тынлы оркестр сығыштары халыҡ күңелен арбай. Халыҡтың ялын оҫта ойоштороғаны һәм художестволы үҙешмәкәрлеккә оҫта етәкселек иткәне өсөн Дарвин Хәйретдинов Рәсәй Федерацияһы Мәҙәниәт министрлығының Почет грамотаһы менән бүләкләнә. Ул етәкләгән драма коллективы башҡорт һәм татар классиктарының «Башмағым», «Ғәлиәбаныу», «Ул ҡайтты», «Ҡыҙ урлау» пьесаларын ысын артистар кеүек башҡара. Үҙҙәре олоғая төшкәс, Дарвин «Шаяртыу» бейеүен йәштәргә өйрәтте. Ике пар ошо бейеүҙе башҡарып, өлкә конкурсында дипломант булып ҡайтты.

Ул йырлау оҫталығына өйрәткән кешеләрҙе иһә һанап бөтөрлөк түгел.

## Балалар

Эш менән мауығып, Дарвин ике ҡыҙы һәм улының үҫеп еткәнен дә һиҙмәй ҡала. Балалары ла атаһы менән әсәһе янында, сәхнә артында үҫә. Атанан күргән — уҡ юнған, тиҙәр, бәләкәйҙән йырлап-бейеп, концерттарҙа ҡатнашалар, музыка ҡоралдарында оҫта уйнайҙар, концерттарҙы алып барырға өйрәнәләр. Әлеге ваҡытта оло ҡыҙҙары Әлфиә — район, өлкә, Рәсәй конкурстары дипломанты — бейеүсе, ойоштороусы, алып барыусы, һүҙ оҫтаһы. Озерск ҡалаһының мәҙәниәт һарайында милли тергеҙеү бүлеге мөдире. Ата-әсәһе кеүек тынғыһыҙ, гел эҙләнеү юлында. Улдары Илдар — музыкант, йырсы, Арғаяшта музыка мәктәбендә балалар уҡыта. Ҡыҙҙары Мөнирә — балалар баҡсаһында тәрбиәсе, балаларҙы йыр-бейеүгә өйрәтә, төрлө милли байрамдар ойоштора, ҡурсаҡтарға һәм балаларға милли кейемдәр тегә. Матур йырлай. Башҡорт йыр донъяһында яңы күренеш — джаз-блюз жанрында йырҙар ижад итеп, үҙе башҡара. Улар бергә йыйылһалар, үҙе бер тамаша: аталары — баянда, Илдар — синтезаторҙа, Әлфиә мандолинала Мөнирәнең йырҙарын эшкәртәләр, фонограмма яҙалар. Әсәләре ҡыҙы Әлфиәгә, Әлфиәнең ике ҡыҙына бейеү алымдарын өйрәтә — улар ҙа бейей. Илдарҙың улы Наил да киләсәктә музыкант буласаҡ. Силәбелә музыка училищеһында белем ала, ҡурайҙа, саксофонда, пианинола уйнай.

## Ғаилә

1977 йылдан уларҙың ғаиләһе Дружный ҡасабаһында йәшәй. Районда иң ҙур мәҙәниәт йорто төҙөлгәс, Дарвинды шунда директор итеп эшкә саҡырҙылар. Улы Илдар художество етәксеһе булып килде. Бында улар «Йәйғор» исемле йыр һәм бейеү төркөмө ойошторҙо. Оҫта йырсылар һәм бейеүселәр туплана унда — Рәжифә Аҡсулпанова, Әклимә Ғәлимова, Сүриә Ғималова, Илдар үҙе лә оҫта йырсы.

«Йәйғор» халыҡ коллективы тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була, төрлө тарафтарҙа сығыш яһап танылыу ала. Конкурстарҙа жюри үҙешмәкәр артистарҙы профессиональ коллективтар рәтенә ҡуйып ҙурлай. Сүриә Ғималова профессиональ йырсы булып китте, Илдар Сәлимов үҙешмәкәр композитор булараҡ танылды. «Клубта эшләү — үҙеңде үҙең яндырыу ул, — ти Дарвин Минһаж улы. — Ижад кешеһе янмайынса йәшәй алмай».

Хоҙай биргән һәләтте йәшереп булмай. Уны ваҡытында күрә һәм үҫтерә белергә кәрәк. Ысын, күренекле артист булырға тейеш ине беҙҙең Дарвин да. Ваҡытында уға тейешле кәңәш биреүсе булмаған. Ләкин ул юғалып ҡалманы, һәләтен сарыф итмәне. «Мин халҡым өсөн йәшәйем, халҡым өсөн йырлайым», ти ул.

1994 йылда өлкәлә һәләтле ғаиләләр бәйгеһе үткәйне. Жюри 23 ғаилә араһынан Хәйретдиновтарҙы иң талантлы ғаилә тип тапты. Унда Хәйретдиновтарҙың өс быуыны ҡатнашты: ата-әсәһе, ҡыҙҙары-улдары, дүрт ейәне. 1995 йылда Өфөлә үткән Ҡоншаҡ районы көндәрендә ҡатнашып, улар сәхнәне һәм кисәне биҙәне. «Атананан күргән — уҡ юнған, әсәнән күргән — тун бескән» тигән төҫлө, балалары ла үҙҙәре кеүек үтә дәртле, һәләтле.

## Тормош дауам итә

Силәгенә күрә ҡапҡасы, тиҙәр ошондай бер-береһенә тап килгән кешеләрҙе. Дарвин менән Эльза — шундай парҙар. Бөгөн бигерәк тә бер туған кеүектәр. Береһе йыр башлаһа — икенсеһе ҡушыла, эш башлаһалар ҙа шулай. Араларында — дуҫлыҡ, ихтирам, иғтибар, бер һүҙле булыу. Стакандағы һыу ҙа тулҡына тигәндәй, тормош та һәр саҡ бер иш бармай. Ваҡытлыса ауырлыҡтарҙы сабырлыҡ менән кисерергә, түҙергә лә бик ҙур аҡыл кәрәк.

Дарвин йәштән бейене, шиғырҙар һөйләне, йырланы. Элегерәк репертуарында шаян, лирик йырҙар күберәк булһа, хәҙер башҡорт халҡының тарихы кеүек бөйөк оҙон көйҙәр өҫтөнлөк итә: «Уйыл», «Ғайса», «Илсе Ғайса», «Һандуғас», «Урал», «Буранбай», «Арғужа», «Йүрүҙән».

Тормош иптәше Эльза Һибәт ҡыҙы ла Башҡортостан Президентының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнгән.

Дарвин Минһаж улына әле 71 йәш, ләкин ул һаман дәрт-дарман, мөләйемлек, илһам сәсеп эшләп йөрөүен дауам итә. Балалар баҡсаһында бәләкәстәргә башҡорт йырҙарын, бейеүҙәрен өйрәтә. Милли тергеҙеү эшендә балалар баҡсаһы уңайлы урын, ә бәләкәйҙән йыр менән һөйләшергә өйрәтеү — иң уңышлы ысул.